## Донъяла

**УКРАИНАЛА МӘСЕТТӘР КҮБӘЙӘ.** Украиналағы Ислам ойошмалары яңы мәсеттәр төҙөүҙең яңы этабын тамамланы, хәҙер ғилемле имамдар әҙерләү етди тора, тип иҫәпләйҙәр. Белемле дин әһелдәре мәсеттәрҙә йәнләндерергә, йәш быуынды тәрбиәләүгә көс һаларға тейештәр. Яңы имамдар алдында Украинаның мосолман һәм башҡа дин тоткан йәштәре өсөн яҡшы үрнәк күрһәтеү бурысы тора. Был бигерәк тә мосолмандар күпселек йәшәгән урындарҙа көнүҙәк булып ҡала. Мәҫәлән, көньякта - Ҡырымда 500 мең ҡырымтатары, көнсығышта - Донбаста 70 мең татар йәшәй. Бөтөн Украина "Альраид" Ижтимағи ойошмалары ассоциацияһы (рәйесе Мерей Басил) Украинала йөҙҙән ашыу мәсетте төҙөүҙә йәки ҡайтанан ҡороуҙа ҙур эш күрһәтте. Басил раҫлауынса, Украина 1991 йылда үҙаллылыҡ яулағандан һуң, мосолмандар өсөн мәсеттәр төҙөү өҫтөнлөклө булып торһа, бөгөн ғилемле имамдар әҙерләү өҫтөнлөклө мәсьәләгә әйләнде. Ҡырым тарихын өйрәнеүсе Әмин Әл-Ҡасим Осман империяһына ингән сакта, Ҡырымда дүрт мендән ашыу мәсет булғанын белдерҙе. Бөгөн был һан 280-де генә тәшкил итә. Әл-Ҡасим был хәлдә совет осоронда власть, Ислам рухын бөтөрөү маҡсатында, күп мәсеттәр һәм Ислам уҡыу йорттарының тартып алыныуы һәм юҡ ителеүе менән аңлата. Шуныһы шатлыклы, тиҫләгән имамдар бөгөнгө көндә белемде камиллаштырыу курстарын үтә. Ҡырымтатар яҙыусыһы Сәйрән Арифов әйтеүенсә, бындай курстарҙың юғары сифатлы имамдар әҙерләп сығарыуҙа ярҙамы ҙур, унда уҡыған күптәр билдәле ғалимдар булып китте. Әле яңырак Ҡырымдың Белогор районы Зеленогорск ауылында бөйөк сәхәбә Әбүбәкер исеме бирелгән яңы мәсет асылды. Мәсеттең имамы шәйех Мостафаға 35 йәш. Ул мәсеттә балаларға дәрестәр бирәсәген әйтте, быға тиклем ул йәш быуынды өйөндә уҡыткан. Шәйех мәсеттең ғилем, тәрбиә һәм Ислам үҙәге буласағын әйтте.



**ИРАНДА ИСЛАМ ФӘНДӘРЕ БУЙЫНСА КУРСТАР ТАМАМЛАНДЫ.** Рәсәйҙең мөфтөйҙәр шураһы Халыҡ-ара департаментының сит илдәр буйынса мәғариф бүлеге тарафынан Иранға Ислам фәндәре буйынса ҡыҫҡа ваҡытлы курстар үтергә бер төркөм Рәсәй йәштәре ебәрелгәйне. Курстар Ҡум ҡалаһындағы халыҡ-ара Әл-Мостафа университетының фәнни-ғилми үҙәгендә үтте. Ике аҙна буйы Рәсәйҙең төрлө төбәгенән килгән йәштәр Ислам фәндәре, Ислам әхлағы, Тәф-сир, Тәүжид буйынса тәрән белем алды. Улар шулай уҡ фарсы телен дә өйрәнделәр. Студенттарҙы Иран буйлап сәфәр йөрөттөләр, улар Теһеранда, Горһанда, Ирандың дини үҙәге һаналған Мешһедта булдылар. Горһан университетында сөнни бүлексәһе лә барлығын әйтергә кәрәк.

Курстарҙы япкан сакта ике илдең дә вәкилдәре бындай аралашыуҙың мосолман өммәтенең үҙ-ара яҡынайыуына булышыуын билдәләне.

# ҒАЛӘМ НУРЫНАН ЯҠТЫРАҠ

*Инглиз философы Томас Карлейл, (Thomas Carlyle, 1795-1881) үҙенең диндәштәре - насраниҙарға мөрәжәғәт итеп, "Ҡаһармандар" китабында Мөхәммәд пәйғәмбәр тураһында яҙа. Китаптан өҙөктәрҙе килтереү урынлы булыр, сөнки был юлдар иҫкермәй торған хәҡиҡәтте бәйән итә.*

### УНЫҢ МИССИЯҺЫ - АСЫҠ ХӘҠИҠӘТ, Ә ҺҮҘЕ САФ ДӨРӨҪЛӨК

Мөхәмәдтең берәүҙән дә дәрес алмағанын онотмаҫҡа кәрәк. Ул йәшәгән дәүерҙә ғәрәптәрҙә яҙма ныҡ таралмаған. Я, хоҙа, ул сакта ғәрәптәр ныҡ наҙан булған. Мөхәммәд ғилемде икенсе сығанактан да ала алмай, ят уттың маяғы менән дә "кораллаҡыу" мөмкин түгел. Ул, фәҡәт үҙенән алда килгән пәйғәмбәрҙәр кеүек, бөйөк кешеләрҙең береһе, мин уны ҡараңғылыҡ баҫҡан дәүерҙә юл асыусы нур менән генә сағыштыра алам.

Бөтөн ғүмере буйы ул үҙ принциптарына тоғро ҡалған, шуларҙы ҡыйыу һәм тәүәккәл яҡлаған кеше. Ул шул тиклем изге күңелле, яҡшы, инабатлы һәм тәҡүәле була, күркәм сифаттарын һанап бөтөрлөк түгел. Ул азат кеше, ул иң тәрән мәғәнәһендә - ысын-ирегет, ихлас, көслө һәм ныҡышмал, бер үк ваҡытта кешеләр менән матур, ипле һөйләшкән. Матур холоклo Мөхәммәд менән аралашыуы рәхәтлек биргән. Кешеләрҙе ҡыуанып киң күңел, асыҡ йөҙ менән ҡабул иткән. Улар менән һәр саҡ яҡшы мөғәмәлә иткән, ә йөҙө йөрәктән сыҡкан нурлы йылмайыу менән балҡып торған. Ләкин бит арабыҙҙа йылмайыуы ла үҙҙәренең ҡылған ғәмәлдәре кеүек үк яһалма булған кешеләр бар.

Мөхәммәд - ғәҙел, дөрөҫлөк һағында тороусы, зирәк, алдан күрә белеүсән, ә йөрәге ҡурҡыуҙың нимә икәнен дә белмәй. Ул бөтә барлығында нур менән тулышкан, караңғылыҡ эсендәге кешеләргә юл күрһәтеп барыусы шәм. Ул үҙенең тәбиғәте менән бөйөк, бер ниндәй ҙә академияларҙа уҡы-маған, уны остаздар тәрбиәләмә-гән, һәм ул быларға мохтаж да булмай.

Фанатик наҙан насраниҙар һәм дәһриҙәр уның тураһында шәхси даны өсөн тырышкан тигән уйҙырма таратырға тырышалар. О Аllah, юҡ, Мөхәммәд - күҙҙәре мәрхәмәт, миһырбанлыҡ, хикмәт һәм аҡыл менән балҡыған сүллектең һәм тауҙарҙың был бөйөк улы - уның уйы-былмышын был донъяның әүрәткестәре һис ҡасан да биләмәгән. Уның йөрәгендә бер генә уйы ла был донъяның хакимлығы, юғары дәрәжәһе менән бәйләнмәгән. Сикһеҙ рух турһында һүҙ барғанда бүтәнсә булыуы ла мөмкин түгел. Ул ялғанлай белмәгән бөйөк йәнле кешеләр иҫәбенән. Беҙ күптәрҙең үҙҙәренә исем-дәрәжәләр ҡушырға яратканын беләбеҙ, был исемдәр уларҙың ысынбарлығын сағылдырмай, бындай кешеләр тормошта ла ялған юлдан барыуҙы хуп күрәләр. Мөхәммәд бөтөнләй икенсе, ул колакты иркәләгән матур, әммә уйлап сығарылған, ысынбарлыкка тура килмәгән, ялған нәмәләрҙе яратмай.

Ул тулыһынса үҙаллы шәхес, был донъяла барған процестар турһында тәрән хәкикәтте асыусы. Йәшәйештең сере, үҙенең бөтөн шомлоғо һәм нәфислеге менән, гүйә, уның күҙ алдында асылып йәйрәп ята. Бер ниндәй ҙә легендалар, ялғандар, уйлап сығарылған нәмәләр уға ошо серҙе асыуға ҡамасау итә алмай. Был сер уның эсенән атылып урғылып сыҡкандай һәм ауаз биргәндәй: "Бына Мин!!!" Бындай ихласлыҡ бөйөк илаһи мәғәнәнән, асылдан тыш мөмкин түгел. Әгәр ҙә был кеше һөйләй башлаһа, уны тын ҡалып тыңлар булғандар, ул әйткәндә халыҡ йөрәге менән тулыһынса ҡабул итә. Уның вәғәҙәләре алдында ҡалған бөтөн телмәрҙәр сүп кенә, әйткән һүҙҙәре ҡоро һәм үле.

Һындарға табынған ғәрәптәр иманға килә, улар бар күңелдән уға йәбешәләр һәм был дин - Хәкикәт. Беҙ уны дөрөҫлөк тип ҡабул итергә тейешбеҙ.

Был диндең нигеҙен ышанырға мөмкин булған берҙән-бер нәмә тәшкил итә. Диндәр төрлө рәүештә, улар төрлө кейемгә төрөнгән, әммә Ислам дине генә уларҙың рухын бер бөтөнлөктә тәшкил итә, ошо бөтөнлөктә үҙ эсенә ала. Ошо рухҡа эйәргән кеше ғаләм тигән изге ҡорамда бөйөк көтөүсегә әйләнә. Был рухҡа эйәргән кеше Аллаһтың ҡануындары һәм әмерҙәре менән камиллыкта йәшәй, уларҙы файҙаһыҙ һүҙ көрәштереүгә, низағҡа әйләндермәй.

Ислам ялған диндәр һәм уйлап сығарылған культтар осоронда килә. Ислам уларҙы йота һәм ул быны эшләргә тейеш ине. Ислам күтәрелгәс, ғәрәптәрҙәге барлыҡ мәжүсилек кипкән үлән шикелле янып юҡка сыҡты, насраниҙарҙың файҙаһыҙ һүҙ көрәштереүҙәре һәм ялған булған бар нәмәләре сан һымаҡ таралып бөттө.

Мөхәммәдтең һүҙе лә, эше лә бер нәмәне генә раҫлай, ул - бөтөн кешелектең миһырбанлы, изге, йомшаҡ күңеле туғаны. Ул төүге әсәбеҙҙең, төүге атабыҙҙың улы.

Мин уны тәбиғәте менән яһалмалыҡ, кәперәйеү кеүек сифаттарҙан азат булғаны өсөн яратам. Ул сүллек улы, һәр нәмәгә үҙ ҡарашы булған, уны берәү ҙә өйрәтмәй-уҡытмай, хәбәрен үҙ исеменән һөйләй, үҙе эйә булғандарҙы биргәне өсөн бер нәмә лә һорамай. Унда тәкәбберлек юҡ, ләкин үҙен кәмһетеү ҙә, көсһеҙлек тә уға хас түгел. Мөхәммәд асыҡ вәғәҙәләре менән Византия кесарҙәренә һәм фарсы батшаһына мөрәжәғәт итә, фани донъяла һәм Ахирәттә уларҙың бурыстарын иҫтәрен төшөрә, үҙенең был донъялағы урынын бик тәрән аңлап эш итә.

Мөхәммәд берәүҙе лә бер ҡасан да алдамай, вәғәҙәләр менән уйнамай, буш һүҙ һөйләмәй. Бер генә нәмә уны борсой - Ахирәткә ирешерлек ғәмәлдәр ҡылыу һәм Хөкөм көнө яҙаһынан ҡурҡыу. Тормош һәм үлем мәсьәләһе бөтөн иғтибарын, диҡҡәтен биләй, ә сикһеҙ ихласлығы һәм ныҡышмалылығы был юлдағы ауырлыктарҙы еңергә ярҙам итә.

Мөхәммәдтең ролен кәметеп күрһәтергә тырышкандар бар. Мин был хәлдә иң оло енәйт тип һанайым. Юҡты уйлап сығарыусыларҙың йөрәге һаҙлыҡ эсендә, күҙҙәре күреүҙән мәхрүм, улар бөтөн яҡлап та ялған ҡамауында тороп ҡалғандар.

Исламдағы бер сифат мине һоҡландыра, минеңсә, ул Исламдың иң гүзәл, мәшһүр сифаты - кешеләр араһындағы тигеҙлек. Был бер һүҙһеҙ, ҡараштарҙың хаҡлығына һәм фекерҙең дөрөҫлөгөнә күрһәтә. Мосолмандар, ҡайһы ғына илдә йәшәмәһендәр, бер-береһе менән бәйләнештә, улар бер өммәт, һәм Исламда һәр кеше тиң хоҡуҡлы.

Исламдың яҡтылығы киңлектәрҙе солғай, уның балҡышы икһеҙ-сикһеҙ ерҙәрҙе яҡтырта, уның нуры төньяҡ меннән көньякты тоташтыра, көнбайыш менән көнсығышты бәйләй. Был хәл Мөхәммәдтең рәсүллегенән һуң ни бары бер быуат эсендә эшләнә. Ғәрәп дәүләте бер аяғы менән Һиндостанда, икенсеһе менән Испанияла баҫып тора. Нисәмә быуаттар буйы Ислам дәүләттәре халыҡтарҙың юлын иман, оло рух, намыҫ, ғәҙеллек, ҡаһарманлыҡ һәм ҡыйыулыҡ, физаҡәрлек нуры менән яҡтырта. Дөрөҫлөктән, күҙ сағылдырғыс балҡышы һәм Аллаһтың ҡулланмаһы - рисаләт - ер йөҙөндә йәшәгән ярты кешелектең йөрәген нурландыра.

# ҒАБДУЛЛА ИШАН СӘИДИ

**(Дауамы. Башы ғинуар һанында).**

### МӘҘРӘСӘЛӘ АЛДЫНҒЫ БЕЛЕМ БИРЕЛГӘН

Әхмәтзәки Вәлиди һүҙҙәренән дә аңлашылыуынса, Муллакай мәҙрәсәһендә шәкерттәрҙе уҡытыу-тәрбиә системаһы ғәмәлдә заман талабына яраҡлы, алдынғы һәм төрлө була. Мәҙрәсәлә дин уҡытыу менән бер рәттән, донъяуи фәндәрҙе өйрәнеүгә, ғәмәли күнекмәләргә етди иғтибар бирелә. Дәрестәр шәкерттәргә яҡын, аңлайышлы төрки телендә халыҡ педагогикаһына таянып, яңы ысул менән алып барыла. Мәҙрәсәлә йәштәрҙе киләсәктә үҙ аллы уңышлы йәшәүгә, дини һәм донъяуи ғилемдәргә, төрлө һөнәрҙәргә эйә булыуға, донъя көтөү, ғаилә тәрбиәләүгә өйрәтеүгә етди иғтибар бирелә. Бында ир балалар физик яктан сынығыуға, сәләмәт йәшәү рәүешенә йәлеп ителә, уларҙы төҙөлеш эштәренә, ағас эшкәртеү, йорт-ҡура күтәреү, балсыҡ менән эш итеү, унан төрлө буяуҙар яһау, тимер менән эш итеү, умартасылыҡ, им-том һәм халыҡ медицинаһы нигеҙендә дауалау кеүек һөнәрҙәргә өйрәтәләр. Ә ҡыҙ балалар йорт эштәренә, аш-һыу әҙерләүгә, кейем тегеү, бәйләү, сигеү һөнәрҙәренә маһирлыҡҡа Мәймүнә абыстайҙан өйрәнә. Был турала Ғабдулла Сәидиҙең улы Мөхәмәтнүр һәм уның ҡыҙы Зәйтүнә апай һөйләүенән билдәле. Улар үҙҙәре лә бик күп һөнәрҙәргә эйә ине. Ирәндек - Ҡыркты буйҙары төҫлө металдарға бай. Был да Ғабдулла Сәидиҙең иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Шәкерттәренә урындағы тау токомдарына, үҫемлектәргә ҡарап, алтын, көмөш, баҡыр мәғдәндәре ятҡылыҡтарын төҫмөрләү серҙәрен өйрәткән. Мәҫәлән, ситтән килеп, ваҡ-төйәк көнкүреш тауарҙары менән сауҙа итеп йөрөгән, алтын мәғдәнен күреп тә белмәгән Мөхәмәтсадиҡ Рәмиев һәм уның Муллакай мәҙрәсәһендә уҡыған уландары Ғабдулла Сәиди йоғонтоһонда һәм өйрәтеүе буйынса мәғдәнселек менән мауыҡып китә. Муллакай мәҙрәсәһендә уҡып сыҡкан талиптар төрлө һөнәргә маһирлығы менән тирә-яҡҡа билдәле булған. Талиптарҙың тәрән белемле, һөнәрле, таһыллы һәм һәр эштә етеҙ булыуы мәҙрәсә мөдәрисе Ғабдулла ишандың шәхси сифаттары менән ныҡ бәйләнгән. Уның энциклопедик ғалим булыуын шәхси китапханаһындағы әҙәбиәтенән үк күреп була. Китаптарының тулы булмаған теҙмәһен үрҙә күрһәтелгән автор Рәхмәтулла хәҙрәт Мәһәҙиев үҙенең "Муллакай" китабында килтергән, һаны 200 том самаһы. Араһында дини китаптар, сит ил сәйәсәтселәренең юлъяҙмалары, Көрьәндән тормош өсөн сығарылған ҡанундар, хәҙистәр, пәйғәмбәрҙәрҙең үрнәк тормошо, ғәрәп грамматикаһы, ғәрәп, фарсы, үҙбәк авторҙарының әҫәрҙәре, белем, әхлаҡ турһында нәсихәттәр, "Нәкшбәндиә" йүнәлешендәге серҙәр, "Файҙалы эштәрҙе еңеләштереү", "Хайуандарҙың тереклек ҡылыуы", "Мәхлүктарҙың ғәжәиб хәлдәре" әҙәбиәт коллекцияһы булған. Китаптар теҙмәһендә мөдәристең үҙе яҙған егермеләп хеҙмәтенең исемдәре теркәлгән. Мәғлүм булыуынса, Ғабдулла хәҙрәт ғәрәп, фарсы телдәрендә уҡыған һәм яҙған, шиғри һәм башҡа жанрҙарҙа ижад иткән. Хәҙрәттең китапханаһындағы ҡиммәтле, оло әһәмиәткә эйә булған әҙәбиәт, үҙе тарафынан яҙылған баҫма һәм ҡульяҙма рәүешендәге хеҙмәттәре 1930 йылдарҙа илдә хөкөм һөргән сәйәси золом-йәбер осоронда юҡ ителә. Улы Мөхәмәтнүр бер гонаһһыҙ репрессияға дусар ителә.

### ШӘКЕРТТӘРЕ КЕМ БУЛҒАН?

Муллакай мәҙрәсәһендә төрлө йылдарҙа 200-ҙән 400-гә тиклем шәкерт уҡығаны билдәле. Улар башлыса Уралтау, Урал аръяғы биләмәләрендә йәшәүсе Бөрйән, Тамъян, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Түңгәүер ырыуҙары башҡорттары була. Улар уҡыуҙы тамамлағас, ауылдарҙа дини хеҙмәт һәм мөғәллимлек менән мәшғүл булған. Үрҙә әйтелгән Рәхмәтулла хәҙрәттең хеҙмәтендә беҙ уларҙы имам-хатип, мәәзин, мөдәрис һәм ахун дәрәжәһендә күрәбеҙ. Уларҙың ҡайһы берҙәрен атап әйтеп китеү урынлы булыр. Әлекке Орск өйәҙе 2-се Бөрйән улысы Назар (Атанғол) ауылы егете Мәтинов Шаһишәриф Миҙәтғәле улы Моҫтай ауылында имам-хатип, 1890 йылда ахун, 1906 йылда Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, 1910 йылда Орск өйәҙендә земство идараһы дини һәм мәғариф бүлеге мөдире, 1917 йылда Бөрйән-Түңгәүер кантоны рәйесе, Ырымбур ҡалаһының Почетлы гражданы була. Ағалы-ҡустылы Мөхәмәтшакир һәм Мөхәмәтзакир (Дәрдмәнд) Рәмиевтар, билдәле алтын сәнәғәтселәре, "Ваҡыт" гәзите һәм "Шура" журналы нәшерселәре. Закир Рәмиев күренекле татар шағиры. 2-се Бөрйән улысы Иҙрис ауылында ахун Фазулла Мәхмүт улы Дәүләткиреев, имам-хатип Сиргәле Ғәйетбаев; Муллакай ауылында имам-хатип Сәйетәхмәт Ғабдулла улы; икенсе имам Хәбибулла Фәйзулла улы, мәәзин Тәхәүтдин Камалетдин улы; Әмин ауылында имам-хатип Фәтхулла Хисмәтулла улы, Мәәмин Ғәбдрафиҡ Ғилмин улы; Теләс ауылының 1-се мәхәлләһендә имам-хатип Рәхмәтулла Нашуируан улы, имам Әбүбәкер Дәүләткол улы, мәәмин Ғиниәтулла Хәснетдин улы, Теләс ауылының 2-се мәхәлләһендә имам-хатип Ғабдулла Ғәбделвәли улы, икенсе имам Ғәбделҡәйүм Мөхәмәтасҡар улы; Ҡолсора ауылында имам Мифтахетдин Дәүләткол улы, мәәзин Мостафа Юлдашкилде улы; Иҫән ауылында имам Сәхиулла мулла Йонос улы, мәәзин Әхмәр Әбүбәкер улы; Байым ауылында имам-хатип Фәт-тәхетдин мулла Заһретдин улы; Үрге Эткол ауылы 1-се мәхәл-ләһендә имам-хатип Ғәбделвәхит Мансур улы, 2-се мәхәлләлә имам-хатип Мәхмүт мулла Хажиәхмәт улы; Йәйекбай ауылында мәәзин Ғәбделсалих Суфиян улы; Мостафа (Моҫтай) ауылында имам Заһиҙулла Хажмөхәмәт улы; Иҫәнбәт ауылында имам-хатип Фазулла Йәләлетдин улы; 1-се Төркмән ауылында имам-хатип Ғабдулла Мөхәмәтшафиҡ улы, уның вафатынан һуң имам Ғаззали Ғабдулла улы; 2-се Төркмән ауылында имам Минһажетдин Хаж-мөхәмәт улы; Күсей ауылында имам-хатип Хәйрелбәшир Хәсән улы, икенсе имам Мөхәмәт Хафиз Садиҡ улы һәм башҡалар бар. Ғабдулла Сәиди ишандан һабаҡ алыусы заттарҙан хужалыҡтың төрлө тармаҡтарында, бигерәк тә мәғариф өлкәһендә хеҙмәт итеү-селәр күп. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙан килеп уҡыған талиптарҙан Ырысмөхәмәт Хантыуаровтың үҙ илендә имам-хатип вазифаһында хеҙмәт итеүе билдәле.

**Әмир СӘЙҒӘФӘРОВ.**